| № п/п | ФИО педагога | Название статьи | Издание | Дата, месяц |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Харисова Мавлида Рафиковна | “Тәрбиәсе тигән даны бар” | Газета “Атайсал” | 27.09.2019 г., №39 |
| 2 | Идрисова Розалия Галияновна | «Великолепный век» | Федеральный журнал для родителей и педагогов “Дошкольный мир” | Октябрь, 2019 |
| 3 | Кунакбаева Гульназира Робертовна | “Лучший? Докажи!” | Газета “Сибайский рабочий” | 21.11.2019 г., № 135 |
| 4 | Зубаерова Янбика Гиниятовна | “Талантлы тәрбиәсе” | Газета “Атайсал” | 20.12.2019 г., №51 |

Тәрбиә

# "ЫНЙЫҠАЙ" БӘЛӘКӘСТӘРҘЕ КӨТӘ



***Башҡортостан Республикаһында 2019 йылдан алып 58 төбәк проекты тормошҡа ашырыла. 2024 йылға тиклем уларҙың дөйөм финанс күләме 172 миллиард һумды тәшкил итәсәк. Иң ҙур сумма—150 миллиард һумдан ашыу сығым «Экология», «Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары», «Торлаҡ һәм ҡала мөхите», «Һаулыҡ һаҡлау», «Демография», «Мәғариф», «Мәҙәниәт» милли проекттарына бүленә.***



Ошо көндәрҙә Сибай ҡалаһының балалар үҫеше үҙәге—«Аҡбуҙат» балалар баҡсаһында 1-2 йәшкә тиклемге кескәйҙәр өсөн 21 урынға тәғәйенләнгән махсус төркөм асылды. «Демография» милли проекты һәм "Ҡатын-ҡыҙ мәшғүллегенә булышлыҡ итеү—өс йәшкә тиклемге балаларға мәктәпкәсә белем биреү өсөн шарттар булдырыу" төбәк проекты сиктәрендә тормошҡа ашырылған төркөмдөң бүлмәләренә капиталь ремонтты төҙөлөш-монтаж эштәрен «Алмаз һәм К «яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте (директоры Д.Р.Абайдуллин) атҡарып сыҡҡан.

—Бөгөн Сибай ҡалаһында 167 төркөмдән торған 16 мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһы эшләй. Уларҙа 4 меңдән ашыу бала шөғөлләнә. 3 йәштән 7 йәшкә тиклемге бәләкәстәрҙең барыһы ла (йәғни 100 процентҡа) балалар баҡсаларында урын менән тәьмин ителде. "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһындағы бар төркөмдәр ҙә заманса йыһазландырылған, бөгөн асылған "Ынйыҡай" төркөмөнә 1 миллион 851 мең һумға капиталь ремонт үткәрелде, бүлмәгә заманса, санитар ҡағиҙәләр һәм нормаларҙы теүәл үтәп, яңы планировка эшләнде. 500 мең һумға уйын ҡоролмалары: ҡоро бассейн, манеж, интерактив таҡта, балалар үҫеше өсөн махсус уйынсыҡтар, мебель һәм башҡа кәрәк-яраҡтар һатып алынды. Шуныһы мөһим: коллективтың берҙәм көсө менән төркөмдә сабыйҙар өсөн уңайлы мөхит булдырылды. Балалар баҡсаһы мөдире Р.Г.Иҙрисова бәләкәсәтәр өсөн асылған төркөмдә эшләйәсәк тәрбиәселәргә махсус әҙерлек үткәреүгә етди ҡараны, тимәк, улар ышаныслы ҡулдарҙа ҡаласаҡ. Балаларын был төркөмгә бирергә теләүселәргә ҡала мәғариф бүлегенә килеп ғариза яҙырға ғына кәрәк,—тине Сибай ҡалаһы хакимиәтенең мәғариф бүлеге етәксеһе Р.Р.Тураев "Ынйыҡай" төркөмөн асыу тантанаһында.

Сибай мәғариф бүлегенең "Фәнни мәғлүмәти –методик үҙәк" методисы Л.Ш. Янбаева белдереүенсә, ҡаланың балалар баҡсаларында барлығы 373 педагог эшләй, уларҙың 29-ы—Мәғариф отличнигы, Рәсәй Федерацияһы Почет грамотаһына эйә булыусы һәм маҡтаулы исем йөрөтөүселә[...] ҙә байтаҡ. Тәрбиәселәрҙең сифатлы эш[...] һәр ваҡыт республика, ҡала етәкселе[...] тарафынан да юғары баһалана. Мәҫәлә[...] "Аҡбуҙат" һәм "Тейенкәй" балала[...] баҡсаһы республиканың эксперимен[...]таль майҙансыҡтары булып тора. "Але[...]нушка", "Айгөл", "Баҙлауыҡ", "Ҡарлуға[...]" һәм "Ҡайынҡай" балалар баҡсаларынд[...] федераль кимәлдә экспериментал[...] майҙансыҡ булдырыласаҡ. Шуны әйте[...] үтергә кәрәк: шәхси балалар баҡсаһ[...] асырға теләүселәргә мәғариф бүле[...] хеҙмәткәрҙәре методик һәм юридик ярҙа[...] күрһәтергә әҙер.

***Ә.Әхмәтйәнов***

***Һүрәттә: саранан күренеш***

НАЦИОНАЛЬНЫЙ ПРОЕКТ «ДЕМОГРАФИЯ»

Лина ЛАСЫНОВА

# «Наши детки - жемчужины!» - говорят в «Акбузате»

...«Акбузат» словно лишь ожидал первого снега: как только в изумительный по своей чистоте белый покров оделись земля, деревья и дома, так и детский садик сразу же принарядился, украсив крыльцо и вход в помещение большими яркими шарами. Редкий из прохожих в минувшую пятницу не задавался вопросом, что за событие послужило тому поводом. А этот повод, в общем и целом, был связан с приятными переменами, обновлением в жизни дошкольного учреждения, опять-таки символически совпадая с процессами, происходящими в природе.

В этот день в детском саду «Акбузат» торжественно открывали новую группу для малышей раннего возраста, от одного до 2 лет. Данное замечательное событие состоялось в рамках реализации национального проекта «Демография», а также регионального проекта «Содействие занятости женщин - создание условий дошкольного образования для детей в возрасте до 3 лет».

На мероприятие были приглашены представители администрации ГО: заместитель главы по социальным вопросам Г.А. Ишемгулова, начальник отдела образования Р.Р. Тураев, а также директор подрядной организации ООО «Алмаз и К», выполнившей капитальный ремонт, Д.Р. Абайдуллин.

Гостей у входа встречали забавные персонажи башкирских сказок. (Надо отметить, что открытие проходило с соблюдением необходимых санэпидтребований). По настроению участников торжества и всему происходящему ощущалась радость долгожданного события как для коллектива учреждения, так и для города. И неудивительно, ведь с самого тамбура, едва переступив порог садика, можно было заметить его преобразившийся вид. Новый интерьер, яркое оформление, свежие краски. Везде как будто стало просторнее и светлее.

Но еще больше впечатлений и эмоций ожидали приглашенных за дверью новой группы, которую открыли символическим золотым ключом. Современная детская мебель, множество игрушек, сухой бассейн с разноцветными шариками - и все «с иголочки», обустроено с любовью. Особый уютный и добрый, какой-то просто кукольный мирок!

Продолжение на 7-й стр.

Окончание. Начало на 1-й стр.




# «Наши детки - жемчужины!» - говорят в «Акбузате»

В нем уже вовсю хозяйничают юные крохи. С непосредственностью обладателей этого, столь нежного, возраста, богатого на познавание окружающего мира и первые открытия, они заняты каждый своим делом: кто-то «плещется» в бассейне, разглядывая его яркое содержимое, другой завороженно следит за крутящейся юлой, которую завела воспитатель, третий с сосредоточенным видом пытается проверить на прочность незнакомую интересную игрушку... Неумолчный гомон, гул, звуки голосов маленьких «почемучек», не знающих уныния и усталости, - все как в любых детских яслях.

Группе, которая начала работать 19 ноября, дали красивое, очень подходящее название - «Ынйыкай», что в переводе с башкирского означает «Жемчужинка». Ведь, действительно, каждый из малышей является бесценным даром, каждый ребенок - это счастье!

- Мы сегодня увидели, что новая группа, как и все остальные в этом детском саду, обустроена и оформлена в современном стиле, в соответствии с санитарными правилами и нормами, - рассказал Рустам Тураев. - Подрядная организация выполнила запланированные работы. На капитальный ремонт этого помещения было потрачено 1 млн 851 тыс. рублей. Чуть более 500 тыс. руб. ушло на приобретение игрового оборудования, мебели и всего необходимого для того, чтобы наши дети чувствовали себя в садике как дома.

Пока что сегодня здесь 8 малышей, а в целом их в спи-

ведут воспитательно-образовательную деятельность 42 педагога.

Как добавил Рустам Ришатович, все образовательные организации города - и детсады, и школы - очень давно и плотно подключились к реализации программы поддержки местных инициатив. «Акбузат», например, участвует в этой работе уже тре-

рублей. «Что это нам дает, вы сами прекрасно видите. Дети находятся в тепле, уюте, постоянно идет проветривание кабинетов и помещения», - отметил начальник отдела образования.

Обеспечение доступности дошкольного образования для детей в возрасте до 3-х лет является одной из приоритетных задач, поставленных Пре-

саду! У нас для их сенсорного, физического, познавательного развития созданы все условия. Помимо современного игрового оборудования, новая группа оснащена интерактивными средствами обучения - это проектор, ноутбук, интерактивная доска и т.д.

Хотела бы от имени коллектива выразить огромную бла-

Плюс к этому смонтировали пожарно-охранную сигнализацию, полностью заменили электропроводку, светильники соответствуют ГОСТу. Постелили линолеум, в туалете сделали теплый пол под плиткой, вытяжную вентиляцию, установили детские унитазы, умывальники. Провели воду, канализацию. Также возвели новый тамбур, где расположены камеры наблюдения.

Да, капитальный ремонт здесь проведен буквально «от» и «до» - начиная с пола и заканчивая потолком. По словам Д.Р. Абайдуллина, все вопросы и детали обговаривались с Розалией Галияновной, вместе выбирали тона отделки комнат, расцветку плитки, чтобы они соответствовали назначению помещений. Капремонт занял около трех месяцев.

Наиболее заинтересованной стороной, чье мнение здесь особенно важно, являются, конечно же, родители малышей. А они что скажут о произошедших переменах?

*Альфира Вакилевна Равилова:*

- Мой ребенок ходит в «Акбузат». Большое спасибо, что создали нам такие условия! Мы со спокойной душой оставляем своих детей и уходим на работу. Коллектив садика очень дружный, хороший. Наши малыши довольные, с удовольствием развиваются!

*Элина Ильдаровна Идрисова:*

- От имени всех родителей хочу выразить огромную благодарность администрации нашего города за открытие этой группы. Мы признательны за вклад и работу также заведующей детсадом, всем сотруд-

ниндәй мәле
теләр янына
этөүҙәренә лә
ова.

УЛ!"

кушерлык пункты
ендә эшләүенә лә
улғаны өсөн ауыл-



аңлап, ярҙамынан
курсаларға тыры-
ҙа, байрам көндәре
йәшлек юбилейыма
ынға ултырғайнык
ыс ярҙам" сакыртты.
ы калдырып, сирле-
п барып, таңға ғына
а килде. Шулай һәр
ындабыҙ,—тип йыл-

әлмән улы—уға һәр
ерәк, шул иҫәптән
мобиле водителе лә.
ҙарҙан алып иң оло
ҙарҙың сәләмәтлеге
ның иғтибарында.
үҙәге Акъярға алып
әүге ярҙам күрһәтеү,
лар яһау—быларҙың
льдшерының ғәҙәти
бинаны тәртиптә то-
ҙә уның иңенә яткан.
ина учреждениеһы
ған мәсьәләләрҙең

## Тәрбиә



# "Халҡым мираҫы— тәрбиә нигеҙе"

**Балалар баҡсаһы—мәктәпкәсә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе йорто. Шуға ла һәр ата-әсә бәлкәсе өсөн балалар баҡсаһын ентекле өйрәнеп, тәрбиәүи йүнәлеш күҙлегенән сығып һайларға тырыша.**

Сибай ҡалаһының "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһында кескәйҙәр үҫеше өсөн бөтә уңайлы, заманса шарттар булдырылған. Тәрбиә һағында барлығы 27 тәрбиәсе, 12 кесе тәрбиәсе күңелдәрен һалып, тырышып эшләй. Улар араһында 5 Башҡортостан Республикаһы мәғариф алдынғыһы, 2 Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреүҙең почетлы хеҙмәткәре бар.

—Беҙҙең "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһының төп бурыстарының береһе— балаларға сифатлы мәктәпкәсә белем-тәрбиә биреү, һәр балаға үҫеш өсөн тигеҙ мөмкинлектәр булдырыу, туған телде һаҡлау, милли мәҙәниәткә ылыҡтырыу,—ти балалар баҡсаһы мөдире Розалия Ғәлийән ҡыҙы Иҙрисова.—Шуны әйтеп үтергә кәрәк: беҙҙә 3 йыл рәттән Башҡортостан Республикаһының мәғарифты үҫтереү институты менән берлектә "Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереүҙә заманса технологиялар ҡулланыу" исемле майҙансыҡ эше алып барылды. Һөҙөмтәлә тәжрибәле, белемле педагогтар тарафынан әҙерләнгән 8 төрлө күргәҙмәле дидактик ҡулланма донъя күрәсәк. Был методик ҡулланма республиканың барлыҡ милли балалар баҡсалары тәрбиәселәре, ата-әсәләр, студенттар өсөн тәғәйенләнгән. Йәш быуынға кесе йәштән үк рухи-патриотик тәрбиә биреү мөһим. Ошо күҙлектән сығып бик күп саралар уҙғарылды, проект эштәре тормошҡа ашырылды. Күптән түгел башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәтенә, тарихына, йолаларына һәм мәҙәниәтенә нигеҙләнеп яҙылған "Халҡым мираҫы—тәрбиә нигеҙе" тип исемләнгән методик ҡулланма баҫтырып сығарылды. Халҡыбыҙҙың тарихын, ғөрөф-ғәҙәтен, бай ауыҙ-тел ижадын бергәләп өйрәнеүҙә, балаларҙы юғары аң-белемле, мәҙәниәтле, иманлы, тәртипле, көслө рухлы, үҙ иленең патриоты итеп тәрбиәләүҙә был методик ҡулланма ҙур ярҙам булыр, тип ышанабыҙ. Шулай уҡ милли ҡурсаҡтар, түшелдеректәр, төрлө биҙәүестәр эшләү эшен яйға һалғанбыҙ. Ошо әйберҙәр менән ҡала кимәлендә үткәрелгән төрлө сараларҙа, күргәҙмәләрҙә әүҙем ҡатнашып торабыҙ. Киләсәктә балалар, хеҙмәткәрҙәр өсөн заманса милли кейемдәр тегеү идеяһы менән йәшәйбеҙ.

Балалар баҡсаһында мәктәпкә йөрөмәгән балалар өсөн "Тамсыҡай" консультация үҙәге эшләй. Тәжрибәле белгестәр бик күп ата-әсәләргә, балаларға педагогик-психологик ярҙам күрһәтә. Үҙәккә ҡаланан ғына түгел, күрше районларҙан да ярҙам һорап мөрәжәғәт итәләр. Бынан тыш, балалар тәрбиәләүҙә, дөрөҫ йүнәлеш биреүҙә "Йәш ата-әсәләр" клубының әһәмиәте ҙур.

"Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы коллективының берҙәмлеген һәм маҡсатҡа ынтылыштарын сағылдырған ҡаҙаныштары бихисап: ҡала кимәлендә ойошторолған мәктәпкәсә белем биреү Гимны конкурсында—Гран-при, Зауыҡлы биләмәләр йылы сиктәрендә ҡала кимәлендәге төҙөкләндереү конкурсының "Иң яҡшы бюджет учреждениеһы" номинацияһында—2-се урын, яңы уҡыу йылына әҙерлек кимәле

аңлап, ярҙамынан
ҡурсаларға тыры-
ҙа, байрам көндәре
йәшлек юбилейыма
ыныңа ултырғайнығ
ыс ярҙам" саҡыртты.
ҙы ҡалдырып, сирле-
п барып, таңға ғына
ра килде. Шулай һәр
ындабыҙ,—тип йыл-

әлмән улы—уға һәр
ерәк, шул иҫәптән
мобиле водителе лә.
йҙарҙан алып иң оло
ҙарҙың сәләмәтлеге
ның иғтибарында.
үҙәге Аҡъярға алып
әүге ярҙам күрһәтеү,
лар яһау—быларҙың
льдшерының ғәҙәти
бинаны тәртиптә то-
ҙә уның иңенә ятҡан.
ина учреждениеһы
ған мәсьәләләрҙең

гличнигы, тәжрибәле
һөнәренең оҫтаһы
ене хеҙмәтләндерә.
лағында уяу тороусы
хеҙмәткәрен ауылда
үҙе лә "Минең өсөн
аштарымдың рәхмәт

ва үҙен бәхетлеләр
Тормош иптәше
улы менән ике ҡыҙ
башлы-күҙле итеп,
һөйөп, уларҙың һәр
һәр көнгә һөйөнөп

*Кәримә Усманова.*
*Хәйбулла районы.*

берлектә "Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереүҙә заманса технологиялар ҡулланыу" исемле майҙансыҡ эше алып барылды. Һөҙөмтәлә тәжрибәле, белемле педагогтар тарафынан әҙерләнгән 8 төрлө күргәҙмәле дидактик ҡулланма донъя күрәсәк. Был методик ҡулланма республиканың барлыҡ милли балалар баҡсалары тәрбиәселәре, ата-әсәләр, студенттар өсөн тәғәйенләнгән. Йәш быуынға кесе йәштән үк рухи-патриотик тәрбиә биреү мөһим. Ошо күҙлектән сығып бик күп саралар уҙғарылды, проект эштәре тормошҡа ашырылды. Күптән түгел башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәтенә, тарихына, йолаларына һәм мәҙәниәтенә нигеҙләнеп яҙылған "Халҡым мираҫы—тәрбиә нигеҙе" тип исемләнгән методик ҡулланма баҫтырып сығарылды. Халҡыбыҙҙың тарихын, ғөрөф-ғәҙәтен, бай ауыҙ-тел ижадын бергәләп өйрәнеүҙә, балаларҙы юғары аң-белемле, мәҙәниәтле, иманлы, тәртипле, көслө рухлы, үҙ иленең патриоты итеп тәрбиәләүҙә был методик ҡулланма ҙур ярҙам булыр, тип ышанабыҙ. Шулай уҡ милли ҡурсаҡтар, түшелдеректәр, төрлө биҙәүестәр эшләү эшен яйға һалғанбыҙ. Ошо әйберҙәр менән ҡала кимәлендә үткәрелгән төрлө сараларҙа, күргәҙмәләрҙә әүҙем ҡатнашып торабыҙ. Киләсәктә балалар, хеҙмәткәрҙәр өсөн заманса милли кейемдәр тегеү идеяһы менән йәшәйбеҙ.

Балалар баҡсаһында мәктәпкә йөрөмәгән балалар өсөн "Тамсыкай" консультация үҙәге эшләй. Тәжрибәле белгестәр бик күп ата-әсәләргә, балаларға педагогик-психологик ярҙам күрһәтә. Үҙәккә ҡаланан ғына түгел, күрше райондарҙан да ярҙам һорап мөрәжәғәт итәләр. Бынан тыш, балалар тәрбиәләүҙә, дөрөҫ йүнәлеш биреүҙә "Йәш ата-әсәләр" клубының әһәмиәте ҙур.

"Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы коллективының берҙәмлеген һәм маҡсатҡа ынтылыштарын сағылдырған ҡаҙаныштары бихисап: ҡала кимәлендә ойошторолған мәктәпкәсә белем биреү Гимны конкурсында—Гран-при, Зауыҡлы биләмәләр йылы сиктәрендә ҡала кимәлендәге төҙөкләндереү конкурсының "Иң яҡшы бюджет учреждениеһы" номинацияһында—2-се урын, яңы уҡыу йылына әҙерлек кимәле буйынса—2-се урын. Был теҙмәне йәнә дауам итергә була.

Балалар баҡсаһының ҙур эштәренең береһе булып "Демография" милли проекты, "Ҡатын-ҡыҙ мәшғүллегенә булышлыҡ итеү—өс йәшкә тиклемге балаларға мәктәпкәсә белем биреү өсөн шарттар булдырыу" төбәк проекты сиктәрендә яңы төркөм үҙ ишектәрен асырға тора. Уның маҡсаты—бала ҡарау буйынса ваҡытлыса ял осоронда ҡатын-ҡыҙҙарҙы уҡытыу, хеҙмәт баҙарында һөнәри белем алыу, үҙ шөғөлдәрен дауам итеү өсөн мөмкинлек булдырыу, шулай уҡ йәш ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү.

Балалар баҡсаһы мөдире билдәләүенсә, ата-әсәләр менән берлектә ике йыл рәттән "Урындағы башланғыстарҙы яҡлау программаһы"да ҡатнашып бинаның эске тәҙрәләре яңы пластик тәҙрәләргә алыштырылыуы ла оло ҡыуаныс.

Балалар баҡсаһында эшләнәһе эштәр бик күп. Бөгөн инновацион технологиялар ҡулланыу—заман талабы. Яңы проекттарҙы тормошҡа ашырыу, грант эшмәкәрлегендә әүҙем ҡатнашыу, ижади эҙләнеүҙәр—коллективтың киләсәккә күҙаллаған маҡсаты.

Етеп килгән тәрбиәселәр көнө уңайынан "Аҡбуҙат"тарҙы һәм барса балалар баҡсаһы коллективтарын ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ. Эштәрендә уңыштар, киләсәктә тағы ла бейегерәк үрҙәргә артылыуҙарын теләйбеҙ.

***Ә.Әхмәтйәнова.***

Тәрбиә

# Уйын – бала саҡтың алтын биҙәге

**Халҡыбыҙ борон-борондан киләсәк быуынды тәрбиәләүгә ҙур иғтибар биргән. «Ҡарға буткаһы», «Кәкүк сәйе» һәм башҡа байрамдарҙы, уйындарҙы балалар үҫешһен өсөн ойошторған.**

Көндәлек тормошта ла сабыйҙарҙың донъяны танып белеүендә, физик һәм рухи яҡтан үҫешендә, дуҫлыҡ, берҙәмлек хистәре тәрбиәләнеүендә, һәләттәрен асыуҙа, үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҡорорға өйрәтеүҙә уйындар ярҙамға килә. Тәрбиә эшендә дөрөҫ алымдар ҡулланғанда ғына көслө һәм үҙ аллы шәхесте үҫтерергә мөмкин. Күп осраҡта тәрбиәне ололарҙан кескәйҙәргә бирелә торған белем тип тә ҡарайҙар. Бала иң элек ата-әсәһенә ҡарап фәһем ала, уларҙың ҡылыҡтарын ҡабатлай. Әлбиттә, һәр ата-әсә балаһының иң яҡшы, аҡыллы булыуын теләй. Бының өсөн үҙҙәре өлгө булып торорға тейеш.

Артабан тәрбиәгә балалар баҡсаһы, мәктәп кеүек белем усаҡтары булышлыҡ итә.

Халыҡ ижады өлгөләре – әкиәт, һөйҙәргес, һамаҡлау, уйындар, мәҡәлдәр ҙә күркәм холоҡ тәрбиәләүгә юл аса.

Сибай ҡалаһының "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһында кескәйҙәрҙе илһөйәр, телһөйәр, кешелекле, кеселекле, ололарҙы ихтирам итеүсе һәм башҡа бик күп матур сифаттарға эйә булыусы итеп тәрбиәләү өсөн эҙмә-эҙлекле эш алып барыла. Бының өсөн, тәрбиәсенең үҙенең дә ошо сифаттарға эйә булыуы мотлаҡ.

Сабый балалар баҡсаһына йөрөй башлау менән тәрбиәнең яңы мөмкинлектәре асыла. Бында тәрбиә һәм белем биреү эшмәкәрлеге милли педагогикаға таянып ойошторола. Мәктәпкәсә йәштәге учреждениела бала ишетеп кенә түгел, күреп, үҙе лә шунда ҡатнашып үҫә, тәрбиәләнә. Тәрбиә сюжетлы-ролле уйындар, күргәҙмә-ҡулланыу материалдары, төрлө йүнәлештәге уйындар аша атҡарыла.

Балаларҙың өйҙә, балалар баҡсаһында ниндәй уйын уйнауҙарын күҙәтеп, белеп барыу мөһим. Уйындар, халыҡ ижадының бер өлгөһө булараҡ, баланы тормошҡа әҙерләргә, һөнәргә өйрәтергә, күркәм сифаттар тәрбиәләргә тейеш. Кешене белгең килһә – ҡылығына, баланы белгең килһә уйынына ҡара, тип юҡҡа әйтмәй бит халыҡ мәҡәле.

Бала уйнаған саҡта үҙен нисек тотһа, үҫеп еткәс, эштә лә үҙен ул шулай тотасаҡ. Киләсәккә нигеҙ уйнаған ваҡытта һалына. Сөнки уйын ниндәй ҙә булһа тормош рәүешенә өйрәнеү, шул тормошҡа инеү сараһы.

*Фәнзилә Солтанова,*
*"Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе.*

*Мәҡәлә түләүле нигеҙҙә баҫылды.

# Инновационные педагогические идеи в работе с детьми раннего возраста



Ҡурсаҡты йыуатыу,уйнатыу.

Йыһазландырыу: сенсорик ашъяулыҡ "Хужабикәләр", ҡурсаҡ.

**Уйын барышы**

Балалар өҫтәл артында кубиктар менән уйнап ултыралар. Бала илаған тауыш ишетелә. Тәрбиәсе:

- Балалар, ниндәй тауыш ишетелә, ишетәһегеҙме? (Тыңлайҙар)

- Тиҙ генә уйынсыҡтарҙы йыйып һалығыҙ әле. Мин ҡарап киләйем әле. (Тәрбиәсе ҡурсаҡты алып инә)

- Балалар ҡарағыҙ әле, беҙгә кем илап килгән? (Балаларҙың яуаптары)

Балалар, әйҙәгеҙ унан һаулыҡ һорашайыҡ.

- һаумыһығыҙ! (һәр береһенән һаулыҡ һораштырыу)

- Ҡурсаҡ һинең исемең нисек? ( Тәрбиәсенең ҡолағына бышылдай)

- Ҡурсаҡтың исеме Ләлә. (Ҡурсаҡ бөтәһе менән танышып сыға "Минең исемем Ләлә, ә һинең исемең нисек?" Балалрҙың яуаптары)

Ләлә: Магазиндан ҡайтып бара инем. Бик арып киттем, шуға илаһым да ҡуйҙым ти.

-Балалар, Ләлә нисек иланы? Әйҙәгеҙ Ләлә нисек илағанын әйтәйек әле: Уа-уа-уа (ҡабатлайҙар)

- Әйҙәгеҙ беҙ Ләләне йыуатып алайыҡ.

- Лә-лә-лә- иламасы һин Ләлә. (3 тапкыр ҡабарлау)

- Афарин балалар! Ләлә илауынан да туҡтаны. Әйҙәгеҙ Ләләне ҡунаҡ итеп ҡайтарайыҡ!

(Өҫтәл янына киләләр, сенсорик ашъяулыҡ артында уйнайҙар)

-Беҙҙең сынаяҡтар серле таҫтамалдар аҫтына йәшеренгән, уларҙы асыр өсөн беҙгә әҙерәк тырышырға кәрәк.( Таҫмаларҙың бауҙарын сисәләр.Балалар серле таҫтамалдарын асалар. Аҫтынан сынаяҡтарын алалар. Һәр береһе ниндәй төҫтә икәнен әйтеп сыға.)

- Балалар, ә минең серле таҫтамалым аҫтынан төрлө төҫтәге сынаяҡ аҫтары килеп сыҡты. Әйҙәгеҙ беҙ һеҙҙең менән уларҙы төҫтәренә ҡарап айырып алайыҡ. Төҫтәрен ҡабатлау.

Тәрбиәсе сәй яһай.

- Сәй бик эҫе, беҙ уны өрөп һыуытып эсәйек. Эҫе сәйгә бешеп ҡуймайыҡ.

**Тын алыу гимнастикаһы**

- Сәйҙе тәмләп, кәнфитләп эсәйек. (Балалар кәнфит алалар, төҫтәрен әйтәләр)

-Ҡунаҡ ҡыҙы Ләләне лә кәнфит менән һыйлайыҡ. ("Мә Ләлә ҡыҙыл кәнфит" тип һәр береһенән төҫтәренә ҡарап һөйләм төҙөп әйттереү)

- Оҡшанымы кәнфит? Тәмле булды эйеме? Ирендәрҙе ялап ҡуяйыҡ.



**Тел гимнастикаһы:** Ирендәрҙе ялайҙар.

- Балалар беҙҙең өҫтәлдә таҡы ла нимәләр бар. Өҫтәлдә ниндәй алмалар бар. (Ҡыҙыл, һары, ҙур, бәләкәй тип балалар яуап бирә)

- Әйҙәгеҙ Ләләне алма менән һыйлайыҡ. (Балалар алма алалар,төҫт!рен әйтеп ҡурсаҡты һыйлайҙар "Мә Ләлә ҡыҙыл алма")

- Афарин балалар! Ләләне бик матур ҡунаҡ иттек. Беҙ уның менән уйнап та алайыҡ.

**Уйын "Был мин"**

"Был мин " (Р.Ураҡсина)

Быna –танауым. Был –минең ҡашым,  
Күҙем,ҡолағым, ә бына башым.  
Ауыҙҙы асһам, телем күренә.  
Теҙелгән тешем өс бөртөк кенә.  
Ҡулды күтәрҙем- аяҡ тыпырлай.  
Үҙенән - үҙе бейергә һорай

- Ләләне ҡунаҡ итеү һеҙгә оҡшанымы? Беҙ уны нисек йыуаттыҡ? Нимә менән һыйланыҡ?

(Тәрбиәсенең ҡолағына Ләлә өндәшә. Сумкаһын ала.)

- Балалар, Ләлә миңә ҡайтырға ла ваҡыт етте, эсәйем мине юғалтып борсолоп торор ти.

- Әйҙәгеҙ Ләлә менән хушлашайыҡ. (Һәр береһе хушлашып сыға. Ләлә ҡайтып китә.)

Тәрбиәсе: Балалар, Ләлә беҙгә матур ғына шалтырауыҡтар ҡалдырып китте. Әйҙәгеҙ беҙ һеҙҙең менән өҫтәлебеҙҙе йыйыштырайыҡ, ә һуңынан Ләлә биргән уйынсыҡтар менән уйнап алырбыҙ.

## "ҠУРСАҠ" КҮНЕГЕҮЕ

*Әмәтова Рәйлә Марат ҡыҙы,*  
*педагог-психолог "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы,*

Билдәле педагогтар раҫлауынса, баланың өс йәшкә тиклем алған тормош тәжрибәһе ғүмер буйына алған тәжрибәһенә тиң. Әлбиттә, һәр педагог һәм ата-әсә баланы кесе йәштән төрлө яҡлап үҫтерергә тәрбиәләргә тырышалар. Әммә ләкин, үҙебеҙҙә һиҫмәҫтән бала тәрбиәләгәндә төрлө тыйыуҙар, киҫәтеүҙәр һәм ҡурҡытыуҙар арҡаһында баланың үҫешенә тотҡарлыҡ яһайбыҙ.

Бөгөнгө осрашыуҙың темаһына инеү өсөн һеҙҙең менән бергәләп "Ҡурсаҡ" күнегеүен уйнап алайыҡ. Мине алдымда ҡурсаҡ ултыра, таҫмаларым да бар. Беҙ хәҙер һеҙҙең менән ошо таҫмалар ярҙамында күҙаллап ҡарайбыҙ, балаға "Ярамай!" тип йыш әйтәбеҙме икән? Ҡурсаҡ

урынында һәр кем үҙенең балаһын күрергә тырыша.

(Педагогтар сиратлап әйтәләр: йүгерергә ярамай, һикерергә ярамай, ҡысҡырырға ярамай, нимә тыңлап ултыраһың һ.б. Алып барыусы таҫмалар менән ҡурсаҡтың ҡулдарын, аяҡтарын, ҡолаҡтарын һ.б. тән өлөштәрен бәйләй).

- Ҡарағыҙ әле, ҡурсаҡ менән нимә булды, ул баштан аяҡ бәйләнеп бөткән. Бына ошолай итеп үҙебеҙҙең инструкцияларҙы үтәүен баланан талап итеп, беҙ баланы "бәйләйбеҙ", үҫергә бирмәйбеҙ.

Ә баланы танып-белеү, хәрәкәт әүҙемлеген һ.б. төрлө йүнәлештәрҙә үҫтереү зарур. Иртә йәштәге балаларҙың ваҡ моторикаһын үҫтереүҙе нисек ойоштороорға була, бөгөн беҙ һеҙҙең менән ошо турала һөйләшәсәкбеҙ.

## ИРТӘ ЙӘШТӘГЕ ЕСКӘЙҘӘРҘЕҢ ВАҠ МОТОРИКАҺЫН ҮҪТЕРЕҮҘӘ БАРМАҠ УЙЫНДАРЫНЫҢ ӘҺӘМИӘТЕ

***Әминева Рәшиҙә Иҙрес ҡыҙы,***
***уҡытыусы-логопед, "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы***

Ысынлап та, ғалимдар иҫбатлауынса, баланың телмәр үҫеше ҡул суҡтарының һәм бармаҡтарҙың нескә хәрәкәттәр башҡара алыу кимәле менән тура бәйләнештә тора. Тимәк, бармаҡ хәрәкәттәре яҡшы үҫешһә, баланың телмәре лә юғары кимәлдә була. Ул бер яҡтан ҡул суҡтарын яҙыуға әҙерләү булһа, икенсенән — тирә-йүндәге предметтарҙы тотоп, һәрмәп, һыйпап өйрәтеү ҡоралы ла булып тора. Шуға ла ҡул суҡтарын ғалимдар "Тыштағы мейе" тип тә атайҙар. Бармаҡ хәрәкәттәрен үҫтереү өсөн төрлө күнегеүҙәр, уйындар ойоштороу яҡшы һөҙөмтә бирә. Шуға күрә балалар баҡсаһында педагогтар баланың тәүге килгән көнөнән алып ваҡ моториканы үҫтереү өҫтөндә даими шөғөлләнергә бурыслылар.

Хөрмәтле ҡунаҡтар, ниндәй эшмәкәрлектәр аша баланың ваҡ моторикаһын үҫтерергә мөмкин? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? (Ҡунаҡтар менән әңгәмә.) Эйе, бергәләп һүрәт төшөрөү, әүәләү, ҡорама йәбештереү, ябай ҡоролмалар йыйыу, теҙеү, һыу һалынған һауыттарҙа таштар менән уйнау, ваҡ әйберҙәрҙе йыуыу, төрлө формалағы һауыттар менән уйнау, төрлө төҫтәге, күләмдәге төймәләр элдереү баланың бармаҡтар хәрәкәтен үҫтереүгә ыңғай булышлыҡ итә.

Ваҡ моториканы үҫтереү өсөн тағы бер мөһим ысул (алым) бар. Ул - бармаҡ уйындары. Бармаҡ уйындарын уйнатҡанда балаларҙың йәш үҙенсәлектәрен һәм һәр баланың мөмкинселектәрен күҙ уңында тотоу зарур. Уйындарҙы ябайҙан ҡатмарлыға күсә барыу прицибына таянып ойоштороу мөһим. Шуға күрә лә, иртә йәштәге кескәйҙәр менән бармаҡ



уйындарын иң ябай, еңел үтәлешле хәрәкәттәрҙән, уйын-күнегеүҙәрҙән башларға тәҡдим ителә.

Иң тәүҙә балаларға уларҙы уратып алған әйләнә -тирәләге предметтарҙы, ҡоштарҙы, хайуандарҙы эшләргә өйрәтеү яҡшыраҡ була. Мәҫәлән, иртәнсәк балалар баҡсаһында балаларҙы ҡабул иткәндә **"Һаумыһығыҙ" уйыны**н ойоштороу бик урынлы, сөнки бала өлкәндәр һәм үҙ-ара тиҫтерҙәре менән ирекле аралашыу һәләтенә өлгәшә, ваҡ һәм эре моторикаһы үҫешә. Шулай уҡ, бындай уйындар балала этикет нигеҙҙәрен формалаштырыуға булышлыҡ итә. Иң мөһиме, бала үҙенең тән өлөштәрен өйрәнә башлай һәм өлкәндәр артынан ҡабатлап телмәр аппараты яйлап өндәрҙе дөрөҫ әйтеү күнекмәләренә өйрәнә.

- Һаумы, ҡояш дуҫҡайым, (ҡулдарҙы өҫкә күтәреп фонариктар яһау);
- Һаумы, минең танауым. (һуҡ бармаҡтар менән танауҙы күрһәтеү);
- Һаумыһығыҙ, ирендәрем (ирендәрҙе күрһәтәбеҙ);
- Һаумыһығыҙ, тештәрем (тештәрҙе күрһәтәбеҙ);
- Ә хәҙер бөтәбеҙ бергә...
- Һаумыһығыҙ дуҫтарым! (бергәләп ҡулға ҡул тотоношоу).

**"Тупһанан өҫкә менәбеҙ, тупһанан түбән төшәбеҙ" уйыны** балаларҙың бармаҡ хәрәкәтсәнлеген үҫтерә һәм һүҙлек запасын байытырға булышлыҡ итә. Шул уҡ ваҡытта һәләтле балалар өлкәндәр менән бергә һанарға ла тырышалар. Балалар урындарында ултыралар һәм тубыҡтарына ҡулдарын һалып бармаҡтарҙы уйнарға әҙерләйҙәр. Уйын бер-нисә тапҡыр ҡабатлана.

Тәрбиәсенәң артынан балалар бармаҡ хәрәкәттәрен ҡабатлайҙар:

Тупһанан өҫкә менәбеҙ,
Баҫкыстарҙы һанайбыҙ.
Бер, ике, өс, дүрт, биш.
Тупһанан түбән төшәбеҙ
Баҫкыстарҙы һанайбыҙ.
Бер, ике, өс, дүрт, биш.

**"Тыныс йоҡо!" уйыны** аша балаларҙы йоҡоға әҙерләү, ваҡ моторика үҫтереү һәм үҙ-ара аралашыу күнекмәләрен камиллаштырыуға булышлыҡ итеү маҡсатына өлгәшәбеҙ.

Был бармаҡтың йоҡоһо килгән, (сәтәкәй бармаҡты бөгөү);
Был бармаҡ йоҡларға ятҡан. (исемһеҙ бармаҡты бөгөү);
Быныһы серем (прикорнул) иткән. (урта бармаҡты бөгөү);
Был бармаҡ йоҡлап киткән. (һуҡ бармаҡты бөгөү);
Ә был бармаҡ күптән йоҡлай. (баш бармаҡты бөгөү);
Ҡем беҙҙә әле шаулай? (икенсе ҡулдың бармағы менән янау);
Сеү, сеү, шауламағыҙ... Беҙҙең бармаҡтар йоҡлай.
(икенсе ҡул менән ҡул суҡтарын һыйпау).

**“Хәйерле иртә, көн!” уйынының** маҡсаты булып балаларҙы йоҡонан һуң яйлап уятыуҙы ойоштороу, аралашыу әүҙемлеген яйға һалыу һәм актив һүҙлеген арттырыу тора. Был уйын аша балаларҙың ваҡ һәм эре моторикаһы, дөйөм координацияһы үҫешә.

Хәйерле иртә, күҙҙәрем! (йомоҡ күҙҙәрҙе һыйпау);
Һеҙ уяндығыҙмы? (“бинокл”дән ҡарау);
Хәйерле иртә, ҡолаҡтарым! (ҡолаҡтарҙы һыйпау);
Һеҙ уяндығыҙмы? (усты ҡолаҡҡа һалыу);
Хәйерле иртә, ҡулдарым! (ҡулдарҙы бер-береһе менән һыйпау);
Һеҙ уяндығыҙмы? (сәпәкәйләү);
Хәйерле иртә аяҡтар! (аяҡтарҙы һыйпау);
Һеҙ уяндығыҙмы? (аяҡтар менән тыпырлау);
Хәйерле иртә, ҡояш! (ҡулдарҙы өҫкә күтәреп бармаҡтарҙы йәйеү);
Беҙ уяндыҡ! (башты өҫкә күтәреп йылмайыу).

**Уйын “Ҡар бөртөктәре”**

Маҡсат: ваҡ моторика үҫтереү, һүҙлек запасын арттырыуға һәм хәрәкәттәр координацияһын камиллаштырыуға булышлыҡ итеү, күтәренке кәйеф булдырыу.

Ҡуҡтә болоттар йөҙә. (ике ҡулдың бармаҡ биттәрен тоташтырыу, шар формаһында - болоттар);

Ҡар бөртөктәре төшә. (ҡулдарҙы өҫкә күтәреп бармаҡтарҙы тырпайтыу һәм әкрен генә аҫҡа төшөрөү);

Көслө итеп ел иҫә. (ирендәрҙе түңәрәкләп алға һуҙыу һәм ҡулдарға өрөү);

Ҡар бөртөктәре оса. (ҡулдарҙы өҫкә күтәреп бармаҡтарҙы тырпайтыу һәм әкрен генә аҫҡа төшөрөү).

Мәҫәлән, “Бармаҡтарым өшөнө” (Ҡулдарҙы бер-береһе менән ышҡыу), “Ҡоштар ем сүпләй” (Тубыҡта бармаҡтар менән туҡылдау), әгәр ҙә бала бармаҡтары менән идара итергә ҡыйынһына икән, был осраҡта тәрбиәсе индивидуаль ярҙам күрһәтә. Мәҫәлән, **“Кәбеҫтә турайбыҙ” уйынында** тәрбиәсе бармаҡтар хәрәкәтен һүҙҙәр менән оҙата:

Беҙ кәбеҫтә турайбыҙ,
Шунан уны тоҙлайбыҙ.
Ҡәбеҫтәне һығабыҙ,
Өҫтөнә кишер ҡырабыҙ.
Болғатып та алабыҙ,
Һауытҡа тултырабыҙ.
Һалҡынға ҡуйып торабыҙ,
Һуңынан тәмләп ҡарайбыҙ.
Бик тәмле лә тоҙло кәбеҫтә!

Бармаҡтар менән уйнағанда шиғыр юлдары менән бәйләү балаларҙың



телмәрен үҫтереүгә генә булышлыҡ итеп ҡалмай ишетеү һәләтен дә камиллаштыра.

Мәҫәлән, “Бесәй” уйынында балалар тәрбиәсе артынан ҡул суҡтары менән бесәйҙе эшләйҙәр һәм ҡатмарлы булмаған һүҙҙәрҙе ҡабатларға тырышалар.

Бесәй, бесәй, бесәй шул,
Бесәй әле кескәй шул.
Үҙе мырлай ҙа, мырлай,
Әллә ул шулай йырлай.

Бармаҡ уйындары тәүҙә өлкәндәр күрһәтеүе һәм улар менән бергә яйлап башҡарыу сифатында үткәрелһә, аҙаҡ—утәү темпы һәм һаны арта, ҡатмарлаша бара.

Шулай итеп, бармаҡ уйындары баланың бармаҡтарының мускулдарын нығытыуға, иғтибарын, хәтерен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүгә булышлыҡ итеү менән бер рәттән телмәр үҫешенә лә ыңғай йоғонто яһай.

## ЙОШТОРОЛҒАН БЕЛЕМ БИРЕҮ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ “ӨЛӘСӘЙГӘ ҠУНАҠҠА”

*Абдуллина Рәмзиә Рәфкәт ҡыҙы,*
*Ҡәримова Фәниә Шәйхитдин ҡыҙы,*
*Йәрмөхәмәтова Көнһылыу Мөхәмәд ҡыҙы*
*«Аманат” балалар баҡсаһы тәрбиәселәре*

Эшмәкәрлек: аралашыу, танып белеү.

Маҡсат: иртә йәштәге балаларҙың һүҙ байлығын үҫтереүҙе дауам итеү.

Бурыстар:

- предметтарҙың атамаһын, формаһын,төҫтәрен үҙләштереү,
- аңлаған һүҙҙәрҙең һанын үҫтереү, һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешен талап итеү,
- ябай алымдар менән ҡоролмалар төҙөргә өйрәтеү,
- ғаиләгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү

Йыһазландырыу: бейәләй ҡурсаҡтар, тауарҙан эшләнгән юл, ҡамыр - пластилин, төрлө төҫтәге тарелкалар, алъяпҡыстар, еүеш салфеткалар, йорт хайуандары уйынсыҡтары, 2 пласмас тас, ҡарабойҙай, төрлө төҫкә буялған дөгө ярмалары, лего- конструкторҙар, ширма -өй, ҡурғаш.

Һүҙлек эше: быҙау, йомшаҡ, түңәрәк, ҡалас, һыйыр, һарыҡ, ҡартатай, өләсәй

Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге барышы: